*Закир ШАКИРОВ*

# ОЛО ЫРҒЫҘҘЫ БУЙЛАП



*Март айының һуңғы көндәрендә Ырғыз буйы башкорттарының королтайҙары уҙғарылды: 26 марта Оло Черниговка касабаһында — Һамар өлкәһе, 27-һендә Перелюб касабаһында Һарытау өлкәһе вәкилдәре йыйылды. Йыйындарҙа матбуғат һәм киң информация министры Зөфәр Мөхтәр улы Тимербулатов етәкселегендәге Башкортостан делегацияһы катнашты. Унын составында «Ватандаш» журналы, «Башкортостан» һәм «Йәшлек» гәзиттәре журналистары, «Китап» нәшриәте хеҙмәткәрҙәре, яҙыусылар, «Йәдкәр» фольклор-эстрада төркөмө артистары, Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы вәкилдәре булды.*

Һамар өлкәһендә 7,5 мең башҡорт йәшәй, шуларҙың яртыһы Оло Чернигов районы Хәсән, Кинйәғол, Ҡыпсаҡ, Ырғыз, Диңгеҙбай, Бөрйән, Таллы һәм Оло Глушица районы Ташбулат (Күстән), Моратша ауылдарында. 50-се йылдарҙа нигеҙ һалынған Костино, Исток, Южный ҡасабаларында ла халыҡтың яртыһы тиерлек беҙҙең милләттәштәребеҙ. Үҙҙәрен ҡыпсаҡ, үҫәргән, бөрйән ырыуҙарынан тип иҫәплләйҙәр. Төбәктән байтаҡ күренекле шәхестәр сыҡҡан. Диңгеҙбайҙа тыуып үҫкән Рәшит Ниғмәти, Хәсән ауылы ҡыҙы Һәҙиә Дәүләтшина, Ташбулаттан сыҡҡан Ғөбәй Дәүләтшин кеүек арҙаҡлы шәхестәрҙе Башҡортостанда бик яҡшы беләһәләр, күренекле ғалим Ғәббәс Дәүләтшин (ул да Ташбулатлыҡы), яҙыусы Бәшәр Хәсән (Бөрйәндән), оҙаҡ йылдар мәғариф министры булған Фатима Мостафина (Диңгеҙбай ауылынан) кеүек милләттәштәребеҙҙең исемдәре күптәргә, айырыуса йәштәргә аҙыраҡ таныш. 1921-23 йылдарҙа Ырғыз буйында барған «Йәшелдәр» ихтилалын етәкләгән, үҙҙәренең «Йәшел республика»һын төҙөгән ҡаһарман башҡорттарҙың хатта исемдәрен иҫкә алыу ҙа бөтөнләй тыйылып, инде күптән онотолған.

1962 йылға тиклем Һамар өлкәһендәге башҡорт ауылдарында мәктәптәрҙә уҡытыу фәҡәт туған телдә алып барыла, дәреслектәр, методик ҡулланмалар Башҡортостандан килә. Министр Фатима Хәмит

ҡыҙы Мостафина Ырғыҙ башҡорттарына айырыуса ҙур иғтибар бирә. Ул осорҙо хәҙер һағынып иҫкә алырға ғына ҡалғандыр: күрше өлкәләрҙә йәшәгән башҡорттар мәғариф һәм мәҙәниәт йәһәтенән Башҡортостан менән бер бөтөндө тәшкил итә бит. Булғанды емереп ташлауы еңел, ә хәҙер килеп яңынан тергеҙеүе... Әлеге көндә Костино, Исток, Бөрйән, Диңгеҙбай, Украинка, Таллы, Ташбулат мәктәптәрендә туған тел аҙнаһына ике сәғәт кенә уҡытылыуы мәсьәләне хәл итерлек түгел, әлбиттә. Йәнә, бындағы башҡорттарҙың күбеһе ваҡ ауылдарҙа йәшәгәс, хәл артабан ҡатмарлаша бара. Һамар ҡалаһында 2 меңдән ашыу башҡорт йәшәһә лә, унда башҡортса уҡытыу бөтөнләй юҡ. Ике тиҫтәгә яҡын бала «Яҡтылыҡ» исемле татар мәктәбендә белем ала (унда бөтәһе 200-гә яҡын уҡыусыға 30-лап педагог белем бирә).

Милли матбуғат эштәренә килгәндә, ҡоролтай алдынан ғына Һамар өлкәһе башҡорттарының ижтимағи-сәйәси гәзите «Ҡоролтай»ҙың тәүге һаны донъя күрҙе. Уны ойоштороуҙа «Спецмашмонтаж» акционерҙар йәмғиәтенең баш инженеры Ғәбделбәр Сауғанов ҙур ярҙам күрһәткән. Һамар мосолмандарының рус телендә сыҡҡан «Азан» аҙналыҡ гәзитенә ҡушымта рәүешендә ай һайын башҡортса «Ырғыҙ» исемле баҫма нәшер ителә, ә 2003 йылда ул айына ике тапҡыр сығасаҡ. Ошо баҫмалар ныҡлап аяҡҡа баҫһын өсөн, әлбиттә, профессиональ кадрҙар, тотороҡло финанс сығанағы, матди тәьминәт талап ителә. Әлегә был эш «Азан» мөхәррире Шамил Ғәлимов, «Ҡоролтай» мөхәррире Сания Ноғманова кеүек энтузиастар иңендә генә ята.

Һамар башҡорттарының оло йыйыны II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына әҙерлек сиктәрендә үткәрелһә лә, унда күтәрелгән мәсьәләләр яҡын киләсәктә лә актуаль булып ҡаласаҡ әле. Уҡыусылар иғтибарына ундағы сығыштарҙы тәҡдим итәбеҙ.

**Һамар өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Сынтимер Латип улы ҒАРИФОВ:**

— «Хәсрәт түгел, хәстәр йыйҙы бөгөн беҙҙе...» — тип шиғыр юлдары менән башлағайны Беренсе ҡоролтайҙағы сығышын халыҡ шағиры Мостай Кәрим. Унан һуң ете йыл ваҡыт үтеп тә киткән. Ошо дәүер эсендә нимәләр эшләп өлгөрҙөк, тағы ла ниҙәр эшләргә — шуларҙы барлау, киләсәгебеҙҙе хәстәрләү өсөн йыйылдыҡ беҙ бөгөн дә. Ҡоролтай хәрәкәте — беҙҙең милләт булып өлгөргәнлек күрһәткесе. Беҙ үҙебеҙҙең милләт мәсьәләләре менән генә сикләнмәйенсә, башҡа халыҡтар араһында ла лайыҡлы урын яуларға ынтылабыҙ.

Беҙ йәшәгән төбәк — аҫаба башҡорт ере. Бынан байтаҡ күренекле милләттәштәребеҙ сыҡҡан. Рәшит Ниғмәти, Һәҙиә Дәүләтшина, Ғөбәй Дәүләтшин кеүектәр — беҙҙең мәңгелек ғорурлығыбыҙ. Ошо төбәктең киләсәге тел, милли мәҙәниәт үҫеше, уларҙы һаҡлап алып ҡалыу менән бәйле. Тел — милли мәҙәниәттең төп ҡоралы, тиер инем мин. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, беҙҙә ул хәҙер ғаилә ҡулланышынан да ҡыҫырыҡлап сығарылып бөткән тиерлек. Ә шул уҡ ваҡытта донъяла беҙҙең тарих, мәҙәниәт менән ҡыҙыҡһыныусылар арта ғына. Беренсе ҡоролтайҙа Элтон Доннелли, Маргарет Эрсен-Раш һәм башҡа Көнбайыш ғалимдары ҡатнашты, улар беҙҙең телде ныҡлап өйрәнә. 1862 йылдан башлап йыл һайын Лев Толстой беҙҙең Кәрәлек башҡорттарына ҡунаҡҡа килеп йөрөгән, телебеҙҙе өйрәнгән, малсылыҡ, игенселек беҙҙә ярайһы уҡ юғары кимәлдә булыуын оҡшатҡан. Заманында уҡымышлы кешеләребеҙ, лидерҙарыбыҙ ҙа етерлек булған. Ысын лидерҙар әле лә бар арабыҙҙа. Телде, милли мәҙәниәтте, йолаларыбыҙҙы пропагандалаған энтузиастарға рәхмәт әйткем килә. Һамар ҡалаһындағы 2,5 мең башҡорт та милли күтәрелеш кисерә. Тольятти ҡалаһында милләттәш-

тәребеҙ байтаҡ — әле уларҙы күтәрәһе бар.

Мин бөгөн үҙ эшемдә таяныс тип күргән лидерҙарҙың, үҙ төбәгенең патриоттарының исемдәрен атап әйтергә теләр инем. Етәкселәр Туғыҙбаев Заһретдин, Хәжиев Миңләәхмәт, педагогтар Шамғунов Дауыт, Туғыҙбаева Әлимә, Ноғоманова Нурия, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре Шәһәева Фатима, Ғарифова Әлзирә — барығыҙға ла рәхмәт! Һеҙҙең ярҙам менән ошо ете йыл эсендә байтаҡ эш эшләнде. Хәтерегеҙҙәлер, тәүге ҡоролтайыбыҙ 1996 йылдың июнендә Южный ҡасабаһында булғайны. Унан һуңғы осорҙа барлыҡ туғыҙ ауылда ла башҡорт телен уҡытыу индерелде. Өс мәктәптә башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеты йыһазландырылды. Башҡорт телен ете педагог уҡыта, уларҙың өсәүһе — юғары белемле. Ташбулат мәктәбе уҡытыусыһы Әлфиә Хатип ҡыҙы Хисмәтуллина 1999 йылда Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы ойоштorған «Йыл уҡытыусыһы» конкурсында махсус приз яуланы. Ошо йылдарҙа республика юғары уҡыу йорттарына беҙҙең 34 егет һәм ҡыҙ ҡабул ителде. Әлеге көндә Өфө гимназияларында — 5, колледждарҙа — 2, хореография училищеһында — 14, сәнғәт училищеһында 1 кеше белем ала.

Моратша ауылында мәсет асыу ҙур ваҡиға булды, Һабантуй, Науруз байрамдары традицияға әйләнде. «Ырғыҙ» мәҙәниәт үҙәге, «Йәшлек» фольклор төркөмө ойошторолдо. 2001 йылдың 7 сентябрендә төбәккә Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Хәләф Хәлфетдин улы Ишморатов етәкселегендәге ҙур делегация килеүе рухыбыҙҙы ныҡ күтәрҙе. Башҡортостан башҡорттар йәшәгән төбәктәрҙе онотмаһа, беҙ һаҡланырбыҙ, йәшәрбеҙ, үҫешербеҙ. Теләһәк, тырышһаҡ — бөтәһе лә килер, булыр, үҙебеҙ ҙә ихтирам яулай башларбыҙ. Башҡа халыҡтар менән килешеп, бергәләп эшләп, милли үҫеш юлына сығасаҡбыҙ...

**Рыҫташы мәктәбе директоры Дауыт Вәдүт улы ШАМҒУНОВ:**

— Хөрмәтле ҡунаҡтар, ҡоролтай делегаттары! Беҙҙең башҡорт халҡы әүәлдән мөһим мәсьәләләрҙе йыйындарға йыйылып хәл иткән. Әммә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул традиция онотолоп бара. Хәҙер һабантуйҙарға йыйылып, күҙ буяп, хужалыҡ эшмәкәрлеге уңыштары тураһында отчет бирәләр ҙә, аҙаҡ концерт тыңлап, ҡәнәғәт ҡалып таралышабыҙ. Ул һабантуйҙарҙа ла әле ат ярышында ла, көрәштә лә, гер күтәреүҙә лә һуңғы ваҡытта гел йә урыҫ, йә ҡаҙаҡ егеттәре еңеп килә. Ә ҡайҙа беҙҙең башҡорт егеттәре? Ысынлап та, ҡайҙа һеҙ, башҡорт егеттәре?! Атта сабышыу, көрәш майҙанына сығыу өсөн айныҡ булыу кәрәк тәүҙә, ә беҙҙекеләр хәҙер айнымай. Юҡ, бөткән беҙҙә егеттәр, араларында атҡа менерҙәйҙәре лә, көрәшкә сығырҙайҙары ла, гергә тотонорҙайҙары ла ҡалмаған — араҡы бөккән барыһын да. Кирегә тәгәрәйбеҙ. Рәми Ғарипов бер шиғырында:

Ниңә китте Һәҙиәләр,
Ниңә тыумай Ниғмәти...

тип, нәҡ беҙҙең Ырғыҙ буйы башҡорттарына мөрәжәғәт итә. Ысынлап та, арабыҙҙан интеллигенция, уҡымышлы кешеләр аҙ сыға. Һөҙөмтәлә башҡа милләттәрҙән һәр яҡтан артта ҡалабыҙ. Ниғмәти, Һәҙиәләр кеүектәр үҫеп торһон өсөн, уларҙың исемдәрен мәңгеләштерергә кәрәк — ул бөйөк шәхестәр һәр саҡ өлгө, үрнәк булып торһон. Өфөләге һәм Һамарҙағы ағайҙар һәм апайҙар ғына онотҡанда бер килеп сығып, беҙҙе күтәрә, төбәкте тергеҙә алмаҫ. Әйткәндәй, Өфөгә лә дәғүә бар. Һуңғы осорҙа унда донъя күргән уҡыу әсбаптарының сифаты ҡәнәғәтләнерлек түгел. Ҡайһы бер китаптарҙың файҙаһынан зыяны күберәк — кемде был тема махсус ҡыҙыҡһындыра, һәр китаптың һәр битен, юлын күрһәтеп, аңлатып бирә алам. Улар башҡортто күтәрмәй, ә кәмһетә генә... Һәҙиә кеүек шәхестәрҙе пропагандалайым тиһәң, төрлө баҫмаларҙа бербереһенән күсереп яҙылған «тра-

фарет» биографияларҙан башҡа бер ни юҡ. Ә артабан нимә? Китаптарын күпләп, йышыраҡ һәм матур итеп сығарырға кәрәк түгелме? Һәҙиәнең «Ырғыҙ» романын яңынан нәшер итеү кәрәк, ул бик һирәк китапҡа — библиографик ҡомартҡыға әйләнде.

Беҙгә, педагогтарға, этнопедагогика мәсьәләләренә күберәк иғтибар итергә кәрәк. Бында Өфөнән башҡа эш ыратып булмаясаҡ.

Ырғыҙ башҡорттарын ниңәлер аҙ һүҙле, талантһыҙ халыҡ тип иҫәпләүҙәренә өйрәнеп бөткәнбеҙ. Әлбиттә, был дөрөҫ түгел, шуның киреһен раҫлау өсөн Өфө, Башҡортостан унда уҙғарылған һәр бер сараға беҙҙе лә саҡырырға онотмаһын ине — беҙ ҙә бит тарихи Оло Башҡортостандың бер өлөшө. Өфөнән профессиональ сәхнә оҫталарының йышыраҡ килеүен теләр инек. Әле бына беҙҙә «Каруанһарай» төркөмө булып китте — халыҡ үҙҙәрен бик яратып ҡабул итте. Рәсүл Ҡарабулатов, Мәхмүт Нәҙершин, Вилдан Яруллинды, башҡа егеттәрҙе беҙҙә хәҙер беләләр. Рәхмәт уларға, йышыраҡ килеп йөрөһөндәр. Уларға ҡарап, беҙҙә лә йәштәр күтәрелә бит. Ташбулатта «Йәшлек» тигән фольклор ансамбле ойоштороп ебәргәндәр. Үҙебеҙгә лә әүҙемерәк булырға кәрәк. Әле Һамарға Фәйзи Ғәскәров исемендәге бейеү ансамбле килергә йыйына. Меңгә яҡын билеттың ни бары 150 данаһы ғына һатылған әлеге көндә. Шунан һуң уларҙы нисек яңынан саҡыраһың?

Матбуғат баҫмаларына килгәндә, минеңсә, «Ырғыҙ» йә «Ҡоролтай» гәзитен «Степной маяк» район гәзитенә ҡушымта итеп сығарһаҡ, яҡшыраҡ булыр ине. Хөрмәтле министр Зөфәр Мөхтәр улы Тимербулатов ярҙамы менән Ҡурған өлкәһе Сафакүл районында «Замандаш» гәзите сыға башлаған кеүек, тимәксемен. Баҫма бик кәрәк, ете йылға бер ошолай йыйылыу ғына аҙ. Беҙ әле Башҡортостандың мәҙәниәт, мәғариф, матбуғат өлкәһендәге ярҙамына бик мохтажбыҙ, күрһәтелгән ярҙам өсөн ҙур рәхмәт.

Күрһәтелгән етешһеҙлектәргә, проблемаларға ҡарамаҫтан, ҡоролтай эшмәкәрлеген ҡәнәғәтләнерлек тип иҫәпләйем.

**Хәсән ауылы мәктәбенең элекке уҡытыусыһы, пенсионер Рәзиә Сәхәү ҡыҙы УСМАНОВА:**

— Мин Дауыт ҡусты күтәргән мәсьәлә буйынса бер-ике һүҙ әйтергә теләйем. Ҡайҙа беҙҙең Һәҙиәләр, ҡайҙа беҙҙең Ниғмәти, тинек. Ә ҡайҙан улар булһын, ҡайҙа үҫһен? Донъяға Һәҙиәне биргән беҙҙең Хәсән ауылы 60-сы йылдарҙың башында гөрләп ултырған ҙур ауыл ине. Хәҙер 20 йорт тороп ҡалды, шунда пенсионерҙар ғына бик ауыр хәлдә йәшәп ята. Һыуҙы ситтән ат менән ташыйҙар. Йәштәр ситкә китеп бөттө. Күрше Костинола аҙнаһына ике дәрес башҡорт телен өйрәнәләр — ул ғына аҙ. Гел башҡорттар ғына йәшәгән ауылдарҙа ла шул ҡәһәрле 1962 йылдан алып тик урыҫса уҡыталар — бының менән ризалашыу һис кенә лә мөмкин түгел. Башҡорт телендә уҡып белем алған быуын олоғайып бара, ә йәш әсәләр ғаиләлә лә сит телдә һөйләшә. Балалар башҡорт телен, әҙәбиәтен өйрәнергә ынтылып тора, әммә уҡыу сәғәттәрен арттырыу, Өфөнән килгән методикаларҙы, программаларҙы үҙгәртеү талап ителә.

Башҡортостан баҫмалары бер заман Һәҙиәгә музей асыу мәсьәләһен күтәргәйне, аҙаҡ был эш тамам онотолдо. Ул беҙҙең генә хәлдән килмәй — пенсионерҙар хатта ауылды ла һаҡлап ҡала алмаясаҡ. Һәйбәт кенә магазин бинаһы бушағас, беҙ — бер төркөм энтузиастар — шунда музей ойошторабыҙ тип даулаша башлағайныҡ. Хәҙер ул ташландыҡ бина ла емерелеп бөтөп бара. Тирә-яҡ ауылдарҙа ла магазиндар, клубтар ябылып, юҡҡа сыға. Беҙ ҡайҙа, нимәгә барабыҙ ул? Ҡыҫҡаһы, бөтә башҡорт халҡын данлаған Һәҙиә апайҙың ауылын һаҡлай алманыҡ. Һәҙиә хәтере алдында уңайһыҙ, хөрмәтле милләттәштәр. Мин был һүҙҙәрем менән бөтә башҡорт халҡына, бөтә

Оло Башҡортостанға мөрәжәғәт итәм, сөнки Һәҙиә кеүек бөйөк шәхестең мәңгелек рухы беҙҙе бер ҡасан да тынғыла ҡалдырмаясаҡ. Беҙҙең намыҫта ҡалды был хәл, туғандар...

**Оло Черниговка районы администрацияһы башлығы Анатолий Петрович КОРШИКОВ:**

— Һамар өлкәһенең иң көнсығыш төбәгендә урынлашҡан Оло Черниговка районында йәшәгән башҡорттар — бындағы берҙән-бер төп халыҡ. Рустарҙың тәүге ауылдары 1837 йылда ғына, шул быуаттың 30-сы йылдарында башланған реформалар осоронда барлыҡҡа килә, ә 1861 йылда крепостное право бөтөрөлгәс, ерһеҙ ҡалған халыҡ Волга аръяғындағы далаларға күпләп ағыла.

Бөгөнгө көндә районда 22 мең кеше йәшәй, уларҙың 12 проценты — башҡорттар. Регион нигеҙҙә ауыл хужалығы продукцияһы, юғары сортлы ҡаты бойҙай етештереү менән шөғөлләнә. Уҙған йыл беҙ 123 мең тонна иген үҫтереп алдыҡ. Әлеге мәлдә район реформалар осоро кисерә — был ауыр, айырыуса социаль яҡтан билдәле ҡыйынлыҡтар алып килгән процесс. Мәҫәлән, социаль сфераны сәнәғәт предприятиелары балансынан алып, урындағы үҙидара органдарына тапшырыуҙың кире яҡтары тәүҙә үҙен нығыраҡ һиҙҙертәсәк. Мәғариф өлкәһендә лә реформалар алып барыла: айырым төбәктәрҙәге мәктәптәр ундағы көслөрәк урта мәктәп тирәһендә туплана. Ошондай филиаллаштырыу (программа филиалирования) нигеҙендә мәктәптәр тормошондағы традицион бәйләнештәр артабанғы үҫеш аласаҡ: төбәктәге башланғыс, тулы булмаған урта белем биреү мәктәптәре барыбер бит урта мәктәп тирәһендә ойошҡан һымаҡ ине — хәҙер ошо хәл рәсми танила. Беҙҙә был аҙымға ауылдарҙа балалар һаны ҡырҡа кәмеүе лә этәрә — ваҡ мәктәптәрҙе нисек тә һаҡлап алып ҡалырға кәрәк. Заманында ул мәктәптәрҙән Рәшит Ниғмәти, Һәҙиә Дәүләтшина кеүек шәхестәр сыҡҡанын һис онотorға ярамай. Элекке башҡорттар Ырғыҙ, Кәмәлек, Кәрәлек һәм башҡа бындағы йылғаларҙың һәр береһе тураһында йырҙар сығарған һәм быуындан-быуынға еткереп йәшәгән. Тимәк, төбәктең потенциалы, ижади мөмкинлектәре ҙур. Өфө ғалимдары төбәктәге башҡорттарҙың тарихы тураһында китап яҙһа, беҙ финанс ярҙамы күрһәтергә әҙербеҙ. Кешеләрҙең көнкүреш, матди хәлен күтәреп, ошо потенциалды тулыраҡ асыу, мәҙәниәтте тергеҙеү беҙҙең — район хакимиәтенең дә, ҡоролтайҙың да уртаҡ бурысы. Һамар өлкәһендә йыл һайын «Возрождение» тип аталған социаль-мәҙәни үҫеш программаһы ҡабул ителә — шул йүнәлештә лә актив файҙаланыу кәрәк. Проблемаларҙы бергәләп асыҡлап, хәл итеү юлдарын эҙләйек. Оло, изге эшегеҙҙә уңыштар теләйем.

**Башҡортостан Республикаһының матбуғат һәм киң информация министры Зөфәр Мөхтәр улы ТИМЕРБУЛАТОВ:**

— Бында юл ете сәғәтлек кенә тигәс, шул ваҡыт эсендә килеп тә етербеҙ тиһәк, ара байтаҡ икән — төнөн генә килеп төштөк, ҡараңғыла, тирә-яҡты күрә лә алманыҡ. Бөгөн иртән күрәбеҙ — ниндәй матур, киң илдә йәшәйһегеҙ икән!

Һаумыһығыҙ, милләттәштәрем, ҡан ҡәрҙәштәрем! Бына шулай, һәр кемдең үҙенең бәләкәй тыуған иле бар, һәм бар оло иле. Һеҙ үҙегеҙҙең бәләкәй тыуған илегеҙ, ошо ер тураһында шул хәтлем ҙур ғорурлыҡ менән һөйләйһегеҙ икән, быныңныҡлы нигеҙе барҙыр. Башҡорттоң тәбиғәтенә бөтәһе менән һыйышып, бергәләп эшләү, йәшәүгә ынтылыш хас. Башҡортостанда ла бөгөн йөҙҙән ашыу милләт вәкилдәре һыйышып, башҡортостанлыларҙың сағыу палитраһын тәшкил итә, үҙ мәҙәниәтен, милли үҙенсәлектәрен һаҡларға ынтыла. Башҡортостан — ул бөтәбеҙҙең дә оло тыуған иле. Шуны аңлап, республикала ҙур эштәр алып барыла. Килеп тыуған проблемаларҙы хәл итеүҙә

хәҙер яңы, юғарыраҡ кимәлгә сығырға кәрәк — II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы ошо күҙаллаған кимәлдә үтергә тейеш. Проблемалар етерлек. 1991 йылда Башҡортостандың дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителеүе беҙҙең өсөн ҙур мөмкинлектәр асты. Мәҙәниәт, мәғариф өлкәһендә күҙгә күренерлек уңыштарыбыҙ бар. Суверенитетты һаҡлау, артабан үҫтереү талап ителә. Әммә, һеҙ үҙегеҙ ҙә күреп тораһығыҙ, Мәскәүҙәге ҡайһы бер даирәләр федератив мөнәсәбәттәргә ҡаршы ысын мәғәнәһендә сәйәси һуғыш алып бара. Әммә региондарҙы ҡаҡшатыу — ул тотош федерацияны ҡаҡшатыу бит, һәм унан берәү ҙә отмаясаҡ. Әле Башҡортостан барлыҡ килемдәренең 63 процентын федераль бюджетҡа ебәреп тора, үҙендә 37 проценты ғына тороп ҡала. Ә бит Башҡортостан XVI быуаттан алып иҡтисади үҙаллылығын һаҡлап килә.



Республикаларҙы өлкәләр, губерналар кимәленә төшөрөргә тырышалар. Әммә республикаларҙың, шул иҫәптән Башҡортостандың маҡсаттары, хәл иткән мәсьәләләре өлкәләрҙекенән ныҡ айырыла — республикаларға милли-мәҙәни үҫеште лә үҙаллы тәьмин итергә кәрәк бит. Башҡортостан, Татарстан, Яҡутстан кеүек көслө республикаларҙы ҡаҡшатыу, уларҙың дәүләтселек сифаттарын юҡ итеү процесы бара. Әгәр республиканың иҡтисади үҙаллылығы сикләнһә, мәҙәниәт, мәғариф эше менән бәйле программаларҙы тормошҡа ашырыу ауырлаша төшәсәк. Иң тәүҙә Башҡортостандан ситтә йәшәгән башҡорттар менән бәйле программалар сикләнәсәк. Әлегә барыһы ла Башҡортостандың иҡтисади ҡеүәтенә нигеҙләнеп кенә эшләнә. Республиканы күп яҡтан өлгө итеп күрһәтерлек. Сыуаш, мари, удмурт һәм башҡа телдәрҙә — бөтәһе 9 телдә гәзиттәр сығарыу, туған телдәрҙә уҡытыу (ә ул беҙҙә 15 телдә алып барыла) өлкәһендә беҙҙә тупланған тәжрибәне күрше өлкәләрҙә, республикаларҙа, башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙә ниңә ҡулланмаҫҡа? Әйҙәгеҙ, региондарҙың иҡтисади үҙаллылығы өсөн бергәләп көрәшәйек. Һәр региондың, өлкәнең, республиканың, һәр халыҡтың үҙ проблемалары, ҡыйынлыҡтары — уларҙы һәр кем үҙе генә хәл итә ала, хәл итеү юлдарын үҙе яҡшыраҡ белә. Региондарҙы тергеҙеү — ул федерацияны нығытыу бит, һәм унан бөтәһе лә отасаҡ ҡына.

Бына, минең исемгә записка килгән: ниңә «Йәшлек» гәзитенә яҙылыу шул хәтлем ҡиммәт, тип һорайҙар. Беҙҙән тормай ул, төбәктәрҙәге УФПС — федераль почта хеҙмәте идаралыҡтары шундай ҙур өҫтәмә хаҡтар ҡуя. Федераль каталогҡа инеү өсөн дә редакциялар хәҙер ҙур сумма түләй. Шуға ҡарамаҫтан, Башҡортостандан ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙҙе республикала нәшер ителгән баҫмаларға әүҙемерәк яҙылырға саҡырам. Проблемаларҙы барыбер һеҙҙең менән, өлкә хакимиәте менән бергә хәл итергә. Был осрашыу һуңғыһы булмаҫ, ҡоролтайҙар ҙа һуңғыһы булмаҫ тип ышанайыҡ, ышаныс менән йәшәйек...

**Ырғыҙ урта мәктәбе директоры Әлимә Сәйфетдин ҡыҙы ТУҒЫҘБАЕВА:**

— Өфө менән бәйләнештәргә, унан килгән дәреслектәргә, методик ҡулланмаларға, әсбаптарға хәҙер ҡытлыҡ юҡ. Хәҙер эш күберәк үҙебеҙҙән тора. Ырғыҙҙа тик башҡорттар ғына йәшәһә лә, мәктәптә уҡытыу — рус телендә. Проблемаларҙы балалар һаны кәмеүе, ата-әсәләрҙең әүҙемлек кимәле түбән булыуы ҡатмарлаштыра. Халыҡтың милли үҙаңын уятыу өсөн бәйләнештәргә даими төҫ биреү мөһим. Мәҫәлән, ғалим-филолог Салауат Ғәлин беҙҙә йыш булып, уҡытыусыларға оло ярҙам күрһәтә. Өфөләге 1-се һанлы башҡорт гимназияһы беҙҙең Ырғыҙ мәктәбе менән бәйләнеш булдырҙы, уҡытыусы Зөмәрә Хисмәтуллина уҡыусы балалар менән килде. Ошондай формаль булмаған бәйләнештәрҙе нығытыу кәрәк. Әйтәйек, бер-ике аҙнаға ҡурайсылар килеп, йәштәрҙе өйрәтеп китһә, файҙаһы ҙур булыр ине. Йәнә, аудио-, видеокассеталар күберәк алып килегеҙ, йышыраҡ килегеҙ...

* * *

Рәми Ғарипов «Зәлифәкәйгә» тип арнап яҙған шиғырында:

Ырғыҙ буйы — алты ауыл,  
Алтыһы ла алтындан,

тиһә лә, бөгөнгө Һарытау өлкәһендә лә башҡорт ауылдары байтаҡҡа күберәк икән. Милләттәштәребеҙ Һарыш, Ҡатай, Күҙәбай, Ҡунаҡбай, Мәҡсүт, Бәгәнәш, Ураҙай, Ишембай, Ғабдулла, Аҡкир, Ҡыпсаҡ ауылдарында, Целинный ҡасабаһында, район үҙәге Перелюбта күпләп йәшәй. Улар — төбәктең аҫаба халҡы. Урындағы гидронимдар, мәҫәлән, гел башҡорттоҡо. Ул исемдәр йырҙарға, риүәйәттәргә лә инеп ҡалған.

1832 йылға тиклем бындағы башҡорттар 9-сы кантон составында Башҡорт ғәскәренә инә. Аҙаҡ 3 ғәскәри йорт (войсковой юрт) булып, Урал казак ғәскәре составына инә һәм йәнә ярты быуаттан ашыу ваҡыт хәрби сословиела ҡала. Төбәктәге башҡорт ғәскәре һәр саҡ урындағы урыҫ казактарынан күпкә көслөрәк иҫәпләнә. Шуға күрә, мәҫәлән, генерал Покровский һәм башҡа хәрби етәкселәр үҙенә һаҡсыларҙы гел башҡорттарҙан ғына һайлап ала.

1862 йылда төбәктә теүәл 6 мең башҡорт йәшәй, улар 2 таш, 7 ағас мәсет тота. 1899 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренә ярашлы, бында 5961, ә 1918 йылда 9384 башҡорт йәшәй. 1922 йылда улар 5487 кеше генә ҡала. Һуңғы, 1989 йылғы мәғлүмәттәргә ярашлы, өлкәлә 4087 генә башҡорт иҫәпләнә.

Төбәктәге башҡорттарҙың тарихы әлегә ныҡлап өйрәнелмәгән. Мәҫәлән, 1917-1923 йылдарҙағы ваҡиғалар бөтә Башҡортостан тарихы өсөн бик фәһемле була алыр ине. Октябрь революцияһынан һуң элекке 9-сы кантон башҡорттары 1832, айырыуса 1861 йылғы реформалар һөҙөмтәһендә юғалтҡан ерҙәрен ҡайтарып алыуҙы төп маҡсат итеп ҡуя. Волость үҙәге Күҙәбайҙа 1918 йылдың 9 майында, 25 майында һәм 5 авгусында башҡорт халыҡ йыйындары уҙғарыла. Граждандар һуғышы башланғас, элекке өс ғәскәри йорт нигеҙендә «Йәшел ғәскәр» булдырыла. Халыҡ аҡтар һәм ҡыҙылдар араһындағы ҡан ҡойоште ҡатнашмаҫҡа, үҙенең «Йәшел республика»һын иғлан итергә була. Ғәскәри йорттар төҙөгән өс ҡоралды отряд менән Иҙрис Арыҫтыҡ, Дәминдәр һәм «Чепаев» (был кешенең фамилияһы ғына ошо рәүешле һаҡланғанмы, әллә ул ҡушамат ҡына булғанмы) атлы командирҙар етәкселек итә. Тик ҡыҙылдар һәм Совет власы нейтралитет һаҡларға тырышҡан, «беҙ ҡыҙылдар ҙа, аҡтар ҙа түгел — беҙ башҡорттар» тип иғлан иткән «Йәшел республика»ны тынғыла ҡалдырмай. Пугачев ҡалаһында ойошторолған «Красная звезда» большевистик полкы, уның командиры Ибраһим Асылбаев «йәшел бандаларҙы» юҡ итеүҙе маҡсат итеп ҡуя. «Йәшелдәр» Пугачев ҡалаһына һөжүм итеп, урындағы Совет власын ҡолата, «Красная звезда» полкын туҙҙыра.

Ҡала большевиктарҙан азат ителгәс, башҡорттар бер аҙ иркен тын алып ҡала. Ул арала Волга буйында көслө аслыҡ башлана. Дутов казактары еңелгәс, башҡорттарҙың хәле мөшкөлләнә. Дәминдәр, Иҙрис Арыҫтыҡ һәм «Чепаев» отрядтары хәҙер ҡыҙылдарға ҡаршы партизан ысулдары ҡуллана, әммә уңышһыҙлыҡҡа осрай һәм 1922 йылдың аҙағында тар-мар ителә. Айырым төркөмдәр 1923 йылда ла һуғышып йөрөй. Төбәктә геноцид башлана, халыҡ һаны яҡынса икеләтә кәмей. 1922 йылғы мәғлүмәттәргә ярашлы, волостағы башҡорттар һаны 5487 кеше тәшкил итә (1918 йылда — 9384 башҡорт). «Йәшелдәр» 1923 йылда ла ҡорал һалмауын, большевистик геноцид дауам итеүен иҫәпкә алғанда, был һан артабан да кәмей. 1928-1938 йылдарҙа Сталин репрессиялары башланғас, халыҡ йәнә ҙур зыян күрә. Ҡыҙғаныска ҡаршы, төбәк тарихы әлегә ныҡлап өйрәнелмәгән. Ә бит, уйлап ҡараһаң, әҙиптәребеҙ өсөн дә бында күпме материал һаҡлана — Шолоховтың «Тымыҡ Дон» романында тасуирланған хәлдәрҙән дә хәтәрерәк. Ҡыҫҡаһы, төбәктең тарихы яҙылмаған әлегә. «Ырғыҙ»ҙы яңынан яҙырлыҡ һәҙиәләр кәрәк хәҙер беҙгә.

27 мартта Перелюб ҡасабаһында («башҡортлашып» килгән элекке Перелюбская казак станицаһы) уҙғарылған өлкә башҡорттары ҡоролтайында иғтибар үҙәгендә демографик хәл һәм башҡорт телен тергеҙеү мәсьәләләре торҙо. Тик, ҡыҙғаныска ҡаршы, ҡоролтай ултырышы самалы ғына ваҡыт — ни бары ике сәғәт кенә барҙы. «Йәдкәр» фольклор-эстрада төркөмө лә һөҙөмтәлә үҙ программаһын шаҡтай ҡыҫҡартырға мәжбүр булды. Киләсәктә Һарытауҙа йыйындар юғарыраҡ кимәлдә уҙғарылыр тигән ышаныста ҡалып (ни тиһәң дә, 1918 йылда өс оло йыйын йыйып, ерҙәрен ҡайтарған, үҙ «Йәшел ғәскәр»ен төҙөгән, аҙаҡ ҡанға батырылып юҡ ителгән республикаһын ҡорған Ырғыҙ халҡы бит әле улар), был ҡоролтайҙа әйтелгәндәр менән таныштырып үтәйек «Ватандаш» уҡыусыларын.

**Һарытау өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Камил Әлим улы ЭБЛӘЗОВ:**

— Башҡортостан Республикаһы үҙенең дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул иткәс, ҙур эштәр башланды. Беҙ ул процесҡа I Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына әҙерлек барышында ҡушылдыҡ. Әлбиттә, беҙҙең өсөн ҡоролтайҙың республиканан ситтә йәшәгән, халҡыбыҙҙың 40 процентын тәшкил иткән милләттәштәребеҙгә ҡағылышлы ҡарарҙары айырыуса мөһим. Ошо һандарҙы беҙ иғтибар үҙәгендә тоторға тейешбеҙ. Башҡорт халҡының яртыһы тиерлек Башҡортостандан ситтә йәшәй. Беҙҙең өлкәлә, иҫәпләүебеҙсә, кәмендә 6,6 мең башҡорт булырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта республикала башҡорттар һаны кәмеп, урыҫтарҙан һәм татарҙарҙан һуң өсөнсө урынға төшкән. Ошо шарттарҙа һәр бер башҡорттоң, шул иҫәптән ситтә йәшәгән 40 процент милләттәштәребеҙҙең актив позицияла булыуы бик мөһим. Беҙ Башҡортостан Республикаһының ныҡлы терәгенә әйләнергә тейешбеҙ. Маҡсаттарыбыҙҙы республика мәнфәғәттәре менән берләштереү талап ителә. Был йүнәлеш 2 февралдә Өфөлә уҙғарылған Башҡарма комитеттың киңәйтелгән ултырышында айырыуса ныҡ төҫмөрләнде. Унда яҡындағы ике төп эш йүнәлеше күрһәтелде: II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы һәм октябрь айында уҙғарыласаҡ халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы. Беҙ ошо маҡсатта Перелюбта, Пугачев һәм Һарытау ҡалаларында төбәк башҡорттарының XX быуаттағы тарихына арналған фәнни-ғәмәли конференциялар, Перелюбта, Балаковта, Пугачевта һәм Һарытауҙа «Башҡорт халҡының тарихы, бөгөнгө хәле, киләсәге — XXI быуат» тип аталған осрашыуҙар ойошторасаҡбыҙ. Беҙҙең Һарытау башҡорттарының тарихын тергеҙеү, халыҡҡа еткереүҙә төп иҫәп, әлбиттә, Өфө ғалимдарына һәм яҙыусыларына.

Һарытау өлкәһендә Башҡортостан Республикаһы вәкиллеген булдырыу инициативаһы менән өлкә һәм республика етәкселектәренә мөрәжәғәт әҙерләйбеҙ. Был беҙгә киләсәктә һөҙөмтәлерәк эш башлау өсөн кәрәк. Шул иҫәптән иҡтисад, бизнес өлкәһендә, кадрҙар әҙерләүҙә, лидерҙар үҫтереүҙә. Бөгөнгө ҡоролтай резолюцияһына ошо пункттар ҙа индерелгән. Ә Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына килгәндә, уның резолюциялары әлегә декларатив кимәлдә генә ҡала: теүәл сроктар, яуаплылар, башҡарыусылар, ниндәй эш ҡайһы сығанаҡтан финансланырға тейеш — берене лә күрһәтелмәй. Тимәк, күп нәмә ҡағыҙҙа ғына ҡала.

Халыҡ иҫәбен алыуға килгәндә, башҡорттар беҙҙә 6,6 меңдән ашыуыраҡ булырға тейеш тинек. Шуға күрә кампания осоронда, урындағы хакимиәттәр менән килешеп, иҫәп алыу эшендә ҡатнашырға, уны күҙәтеүгә алырға теләйбеҙ. Ниңә ҡайһы бер төбәктәрҙә башҡорттар һаны ҡырҡа кәмегән — быының сәбәптәрен асыҡлайһы бар. Статистик документацияны өйрәнәбеҙ.

Милләтте тергеҙеүҙә иң ҙур, ауыр эш — туған телдә уҡытыу мәсьәләһе. Быны беҙ комплекслы нигеҙҙә алып барырға ниәтләнәбеҙ. Матбуғат, мәҙәниәт, тарих, әҙәбиәт, иҡтисад, дин эштәре буйынса айырым, теүәл проект талап ителә. Мәҫәлән, тарих өлкәһендә эште Һарытау башҡорттары тураһындағы китаптан башларға мөмкин. Башҡортостан ярҙам итһә, бер-ике йыл эсендә ҙур, етди, сифатлы итеп эшләнгән китап әҙерләргә мөмкин. Диндә тергеҙеүгә килгәндә, был йүнәлеш өсөн борсолаһы түгел. Мәсеттәр буласаҡ.

Әле беҙ милләтте уятыуҙа, ҡуҙғатыуҙа иң ауыр осорҙо кисерәбеҙ. Бер ҡуҙғалһа, тергеҙелеү процесы үҙаллы төҫ ала башлаясаҡ. Булғанды һаҡлап, күтәрә башлаһаҡ — башҡорттар булып ҡаласаҡбыҙ.

**Һарытау өлкәһе башҡорттарының милли-мәҙәни автономияһы рәйесе Зөфәр Шәмсеғәли улы ХӘКИМОВ:**

— Мин үҙем бөгөнгө Краснокама районының Иҫке Ҡабан ауылында тыуып үҫкәнмен. Хәҙер ул аҫаба башҡорт ауылы юҡ инде: Башҡортостан АЭС-ы, Ағиҙел ҡалаһы төҙөйбөҙ тип, уны юҡҡа сығарҙылар. Ғаиләлә 11 бала үҫтек. 13 йәшемдә Өфөгә, сәнғәт училищеһына барҙым. Хыялым операларҙа, оло башҡорт сәхнәһендә йырлау ине. Тик яҙмыш мине Һарытау яҡтарына килтереп ташланы. Ошонда хәрби училище тамамланым, хеҙмәт иттем. Курсант саҡта «Захар-татарин» тип йөрөтә башлағайнылар, «юҡ, мин — башҡорт, исемем — Зөфәр!» тип һуғышырға ла тура килде. Шунан һуң миңә «татарин», йә исемемде боҙоп «Захарка» тип өндәшеүсе булманы. Быяа шулай, үҙеңде ихтирам итеүҙәрен теләһәң, көс күрһәтергә лә кәрәк.

Мин үҙ теленән ваз кискәндәрҙе аңламайым. Башҡорттар гел башҡорт араһында йәшәп, сит телдә һөйләшә, балаларының телен боҙа. Ғаиләлә тәртип, талапсанлыҡ булмаһа, мәктәптә аҙнаһына ике сәғәт туған телде өйрәтеп кенә башҡорттар тәрбиәләп булмаясаҡ. Үҙ телебеҙҙә белем биреүҙе, мәктәптә башҡорт телен уҡытыуҙы закондарға таянып талап итеү кәрәк хәҙер. Быуындар бәйләнешен тергеҙеү өсөн тарихты, мәҙәниәтте пропагандалау мөһим. Йәнә, Башҡортостанға терәк булһаҡ, республика күтәрелһә, үҙебеҙ ҙә күтәрелербеҙ, үҫербеҙ. Әммә бөтәһен дә Башҡортостан йә спонсорҙар килтереп тотторор тип көтөп ултырһаҡ, бер нәмә лә үҙгәрмәҫ. Иҡтисадты күтәрһәк — ер һөрөлһә, мал булһа — күтәрелербеҙ. Күтәрелеү, яңырыу өсөн кадрҙар, лидерҙар кәрәк. Әлегә беҙҙең Камил Әлим улы Әбләзов кеүек шәхестәребеҙ, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бик аҙ, шуға күрә башҡа милләттәр менән сағыштырғанда күҙгә күренерҙәй үҫеш юҡ. Камил Әлим улы 17 эреле-ваҡлы предприятие ойоштор-ҙо, банк структураларында эшмәкәрлек күрһәтә, байтаҡ эш урындары булдырҙы. Уның кеүек лидерҙарыбыҙ булһа, мәсеттәребеҙ һалыныр, мәктәптәр ҙә төҙөлөр, башҡортса китаптар ҙа баҫылыр. Ҡоро һүҙ булып ҡалмаһын өсөн, Камил Әлим улы ҡоролтайға ике ауыл мәктәбенә тапшырыу өсөн китап-

тар алып килгән — улар ике ҙур ғына китапхана тәшкил итерлек. Оло, изге эш ул, сөнки белемгә, мәҙәниәткә ынтылған йәш быуын өсөн китаптан да оло нәмә юҡтыр...

**Күҙәбай урта мәктәбенең тарих уҡытыусыһы Тамара Даян ҡыҙы ФӘТТӘХОВА:**

— Беҙҙәге хәлдәрҙе үҙемдең миҫалда ла тулыһынса күрергә мөмкин. Ауылдарҙа гел башҡорттар ғына йәшәһә лә, уҡытыу рус теләндә. Башҡорт телен аҙнаһына ике сәғәт кенә уҡытыу йә факультатив рәүешендә биреү проблеманы хәл итмәй. 1962 йылға тиклем белем алған һәм башҡортса уҡыған педагогтар быуыны пенсияға сығып бөтөп бара, ә беҙҙең һәм беҙҙән йәшерәк быуын телде белмәй. Кадрҙар әҙерләгәндә иң тәүҙә ошо фактор иҫәпкә алынырға тейеш. Мин үҙем, мәҫәлән, башҡортса һөйләшәм һәм уҡый алам әле, ә яҙыуға килгәндә, унырһы инде юҡ. Башҡа коллегаларым да шул уҡ хәлдә.

Беҙҙең Күҙәбайҙа мәктәп 1910 йылда асыла һәм 1962 йылға тиклем эшләп килә, бөтә фәндәр фәҡәт башҡортса уҡытыла. 1963 йылдан алып уҡытыу урыҫ теленә күсерелә. Өлкәләге бөтә башҡорт мәктәптәре шулай юҡҡа сығарыла. Уға тиклем барлыҡ дәреслектәр, методик ҡулланмалар, төрлө әсбаптар Өфөнән килеп тора, кадрҙар ҙа Башҡортостанда әҙерләнә. Мәҙәниәт өлкәһендә лә шулай уҡ була. Ҡыҫҡаһы, беҙҙең төбәк Башҡортостан менән бер бөтөндө тәшкил иткән һымаҡ йәшәй. Беҙгә күп баш ватырға, әллә нәмәләр уйлап сығарырға кәрәкмәй — ни бары 1962 йылға тиклем йәшәп килгәнде тергеҙергә генә. 1962 йылда мөмкин булғанды әле эшләргә мөмкиндер тип уйлайым.

Беҙҙә йәштәр Өфөгә бик ынтыла, әммә унда әлегә бөтәһе лә көйләнеп бөтмәгән. Әйтәйек, 1-се һанлы башҡорт гимназияһында беҙҙең өлкәгә йыл һайын ике квота урыны бирелә. Мин улымды Өфөгә илтеп урынлаштырҙым. Бер йыл уҡығас, кире алып ҡайтырға мәжбүр булдым. Әйтергә лә уңайһыҙ, әммә Өфөгә бер тапҡыр барып ҡайтыу өсөн генә лә 2 мең һумдан артыҡ аҡса кәрәк. Беҙҙәге аҡсаһыҙлыҡты беләһегеҙҙер... Ә йәштәр Өфөгә ынтыла, Башҡортостандың ярҙамына әлегә бик мохтажбыҙ. 1962 йылғы хәлдәрҙән һуң төбәктең ныҡ ҡаҡшатылыуы әле үҙен оҙаҡ ваҡыт һиҙҙерәсәк.

*"Йәдкәр" — королтай сәхнәһендә*

